Зөһрә АЛТЫНБАЕВА

# ЙӘДКӘР ИТЕП ҺАКЛАЙЫК

«Йәдкәр» һүҙе бер быуындан икенсеһенә күсергә тейешле хәтирәләрҙе теркәүсе рухи ҡомартҡы мәғәнәһенә эйә. Бынан егерме йыл элек барлыҡҡа килгән һәм ошо мәртәбәле, мәғәнәле исемде лайыҡлы йөрөтөүсе, халҡыбыҙҙың рухи байлығын заманыбыҙҙың ташҡынлы даръяһында юғалтмайса килер быуындарға илтеүсе «Йәдкәр» фольк-

Йәдкәрселәр сираттағы тамашанан һуң



лор ансамбле башҡорт мөхитен, рухын үҫтереүгә тос өлөш индерә. Халҡыбыҙҙың ғәжәйеп матур йолалары, күңелдәрҙе арбар моңло йырҙары, һоҡланғыс бейеүҙәре дәртле ҡумыҙ, наҙлы ҡурай, сылтыр думбыра тауыштарына сорналып һәм маһир йырсылар, бейеүселәрҙең ғәжәйеп оҫталығына ҡушылып өр-яңынан тыуа, алыҫ үткәндәргә алып ҡайта, моңландыра, тетрәндерә, дәртләндерә. Йәдкәрҙәр алтындарға торғоһоҙ хазина һаналған халыҡ йырҙарына айырыуса иғтибарлы һәм ихтирамлы. Халыҡ йырын барса биҙәктәре, бар асылы менән халыҡҡа еткереүҙе үҙҙәренең мөҡәддәс бурысы һанай улар. Йырсы йөрәген ярып сыҡҡан, уның моңло һәм аһәңле тауышына уралған йыр ғына үҙенең тыңлаусыһын табыуын, тамашасы күңеленә ғүмерлеккә үтеп инеүен яҡшы аңлай йәдкәрҙәр. Халҡыбыҙҙың меңәр йыллыҡ тарихын сағылдырыу, рухи тамырҙарыбыҙҙы барлау маҡсатына һәр саҡ тоғро ансамбль.

«Йәдкәр»ҙе республикабыҙҙа ғына түгел, күрше төбәктәрҙә, сит илдәрҙә лә яҡшы беләләр. 1983 йылда Мәскәүҙә үткән Бөтә донъя йәштәр һәм студенттар фестивалендә, Бакуҙа, Өфөлә һәм Төркиәлә булып үткән халыҡ-ара фестивалдәрҙә лауреат исемен яуланы «Йәдкәр». 1997 йылдың май айында Мәскәүҙә үткән Башҡортостан көндәрендә «Йәдкәр» ансамбле Рәсәй Мәҙәниәт министрлығының Почет грамотаһы менән наградланды. Ансамблдең сығышын бик оҡшаталар һәм Мәскәү ҡалаһы мэрияһы уларҙы ҡаланың 850 йыллыҡ юбилей байрамына саҡыра. Йәдкәрҙәр сит илдәрҙә йәшәгән милләттәштәребеҙҙе лә онотмай. Ундағы ҡәрҙәштәребеҙҙең саҡырыуҙарын ансамбль ағзалары ҙур теләк менән ҡаршы ала.

Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Фәтих Ихсанов ойошторған «Йәдкәр» ансамбленең тәүге программаһының сюжетын Рәми Ғариповтың «Аманат» ҡобайыры тәшкил итә ине. Ошо лейтмотивҡа нигеҙләнеп, йырҙар һәм халыҡ ижады өлгөләре һайлап алына. Төп маҡсат — быуаттар буйы тупланған халыҡ ижады өлгөләрен киләһе быуындарға еткереү. Ике өлөштән торған был программа «Йөрәк хазинаһы» тип атала. «Аманат» тип аталған тәүге өлөшө — ил һәм тел проблемаларына, икенсеһе мөхәббәткә арналғайны. Рәшит Назаровтың мөхәббәт хаҡындағы шиғырҙары композитор Таһир Кәримовтың йырҙары менән үрелде. Һуңынан программаның был өлөшө «Халҡым күңеле — йыр-моң шишмәһе» тип үҙгәртелде. Программаның икенсе өлөшө иһә башҡорт композиторҙары әҫәрҙәренән төҙөлгәйне һәм «Мөхәббәт» тип атала ине.

Ансамблдең икенсе программаһын халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың «Халҡыма хат» поэмаһы буйынса режиссер Иршат Сиражетдинов ҡуйғайны.Башҡот халҡының һәм уның теленең яҙмышы хаҡындағы уйҙар, поэтик кисерештәр, халыҡ ижадының бай һәм сағыу өлгөләре аша һынланды унда. «Йәдкәр» был программа менән бөтә Башҡортостанды ғына түгел, башҡорттар күпләп йәшәгән күрше өлкәләрҙе, Татарстанды, Волга буйы республикаларын йөрөп сыға. «Тере хәтер — тере һыу» тип аталған өсөнсө программаны иһә фольклорсы Розалиә Солтангәрәева менән режиссер Рөстәм Хәлилов ҡуйғайны.

Шуны әйтергә кәрәк, төркөм ойошторолғандан башлап өс таған — Башҡортостандың халыҡ артистары Мәүлетбай Ғәйнетдинов, Тәнзилә Үҙәнбаева һәм Ғәли Хәмзин «Йәдкәр»ҙең терәге, нигеҙе булып торҙолар. Ансамблдең бер йүнәлештә эшләгән, тәүге маҡсатына хыянат итмәйсә үҙ бурысын ихлас атҡарыусы төркөм булып ҡалыуында уның ветерандарының хеҙмәт өлөшө айырыуса ҙур. Фольклорсы ғалим Әхмәт Сөләймәновтың: «Йәдкәр» — академик фольклор ансамбле. Ул халҡыбыҙҙы үткән быуындар туплаған эстетик ҡаҙанышыбыҙ менән таныштырып ҡына ҡалмай,

ә Көнбайыштан килгән аҙҙырғыс, милләтһеҙ, антиэстетик тулҡынға ҡаршы тороуға инъекция үткәреү сараһы ла», — тип билдәләүе тап өҫтөнә баҫа.

«Йәдкәр» — фольклор ансамбле, шуға ла уның сценарийҙары халыҡ ижады ынйылырына, милли рухлы поэзияға нигеҙләнә.

Фольклорсы ғалимә Розалиә Солтангәрәева сценарийы буйынса режиссер Рөстәм Хәлилов сәхнәләштергән өсөнсө программа «Урал батыр» эпосына нигеҙләнгән. «Тере бейеүҙәр һәм ҡөҙрәтле поэзия өлгөләре аша үҙенә арбай.

Үҙенең 20 йыллыҡ юбилейын «Йәдкәр» фольклор-эстрада төркөмө «Мираҫ» тип аталған өр-яңы шоу-программа менән ҡаршыланы. Уны сәхнәгә режиссер Салауат Итбаев ҡуйған. Тамаша бәпес ҡаршылау күренеше менән асыла. Артабан йәш баланы алып ҡайтыу, уны ҡаршы алыу, теләктәр теләү — был күренештәр йыр, бейеү, ҡурай моңо, ҡобайыр әйтеү менән аралашып бара. Сөнки һәр бала сабый



*«Йәдкәр» бейей, «Йәдкәр» йырлай*

хәтер — тере һыу» тип аталған был тамашаның асылын тыуған ил һәм тыуған ер идеяһы тәшкил итә. Тере һыу — ул халыҡтың юйылмаҫ хәтере. Аҡбабай образын башҡарған йырсы Мәүлетбай Ғәйнетдинов халыҡ аҡылының тәрән фәлсәфәһе мәңге тере шишмә булыуын тамашасы йөрәгенә еткереүгә өлгәште. «Йәдкәр»ҙең башҡа тамашалары кеүек, был программа ла халыҡ күңелен байытты, рухын күтәрҙе, йөрәктәргә дәрт һәм дарман өҫтәне. Ғөмүмән, ансамблдең һәр сығышы илһамлы йырҙар, дәртле сағынан уҡ үҙенең шәжәрәһен, халҡының, иленең тарихын, үҙ батырҙарын белергә тейеш.

— Халҡыбыҙҙың шанлы тарих биттәрендә лайыҡлы урын алған данлыҡлы, аҫыл ир-егеттәр һәм ҡыҙҙар бик күп, — ти режиссер Салауат Итбаев. — Исемдәре мәңге онотолмаҫ йырҙарға һалынған шәхестәр улар. Әйтәйек, Салауат, Батырша, Ҡаһым түрә, Ялсығол, Баяс һ. б. Үкенескә ҡаршы, хәҙерге быуын уларҙы онота бара. Беҙ ата-бабалар рухына хыянат итмәҫкә тейешбеҙ.

Башҡортостандың халыҡ артистары Ғәли Хәмзин менән Тәнзилә Үҙәнбаеваның, Ғ.Әлмөхәмәтов исемендәге республика конкурсы лауреаттары Хима Йәнбирҙина менән Венера Рәхмәтуллиналарҙың берсә моңло, берсә дәртле һәм шаян йырҙарын тамашасылар үтә ихлас ҡабул итте. Ләйсән Сәлимгәрәеваның флейтала, Рушан Биктимеровтың ҡурайҙа, Илгизәр Ғәниевтың думбырала, Рәсүл Дауытовтың баянда өҙҙөрөп уйнауына һоҡланмау мөмкин түгел. Башҡортостандың атҡаҙанған артисткаһы Әлфирә Сафиуллинаның «Заһиҙә», «Бөрйән ҡыҙы», «Һыуһылыу», «Сыңрау торна» бейеүҙәре ихлас алҡыштарға күмелде. Ҡыҫҡаһы, «Йәдкәр»ҙең был программаһы ла иҫ киткес матур, бай йөкмәткеле итеп төҙөлгән.

«Йәдкәр» хаҡында һүҙ алып барғанда уның сағыу йондоҙҙары — ветерандары хаҡында айырым әйтеп китмәү мөмкин түгел.

Үҙенсәлекле моңло тауышы менән халыҡ ихтирамын яулаған йырсы Ғәли Хәмзин Белорет районында тыуып үҫкән, халыҡ йырҙарына мөкиббән ғашиҡ егет. Институтты тамамлағас та Башҡорт дәүләт филармонияһында эшләү, үҙе ихлас яратҡан моңло халыҡ йырҙарын халыҡҡа еткереү теләге менән яна. Ул саҡта баянсы Миңләхмәт Ғәйнетдинов етәкселегендәге фольклор ансамбле тамашасыларҙың ихтирамын яулап өлгөргәйне. Ғәлигә лә бәхет йылмайҙы — ансамблдә эшләй башланы. Ә һуңынан Ғәли Хәмзин үҙе ошо коллективтың етәксеһе булып китте. Ғәли Хәмзин башҡарыуындағы «Хәйрүләкәй», «Ирәндек», «Тәфтиләү», «Ҡурайсы егет» кеүек аҫыл йыр өлгөләрен һәр кем һоҡланып тыңлай.

Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Тәнзилә Үҙәнбаева Мәләүез районының Түләк ауылы ҡыҙы. Үҙен белә-белгәндән алып йырлай: иҙән йыуғанда, һыйыр һауғанда, урамда йөрөгәндә, болондарға сыҡҡанда ла йырлап йөрөгәне хәтерендә. Сәнғәт училищеһында уҡыған сағында уҡ Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге конкурста лауреат була Тәнзилә. Тырыш хеҙмәт яңы уңыштар алып килә: Мәскәүҙә, Кремлдең съездар һарайында үткән концерттарҙа, Германия, Чехословакия, Монголия, Төркиә сәхнәләрендә уңышлы сығыш яһаны. Хәҙер инде Тәнзилә Үҙәнбаеваны ансамблдең йөҙөк ҡашы тип әйтергә мөмкин. Репертуары бай йырсының: «Баяс», «Шәрәфетдин», «Хисам», «Бөҙрә тал», «Был донъяның ҡәҙерен беләйек» һ.б. үҙенсәлекле халыҡ йырҙары бар унда. Ғөмүмән, «Йәдкәр» йырсылары башҡорт халыҡ йырҙарының матурлығын, бөйөклөгөн тойоп башҡара, шуға ла улар йөрәк төпкөлөнән урғып сыға, тетрәндерә, моңландыра, йыр, йырсы һәм тамашасы бер бөтөнгә әүерелә.

«Йәдкәр» ансамбле башҡорт сәнғәте күгендә үҙе бер йондоҙлоҡ. Һанай китһәң, һандар етмәҫ төҫлө: ҡурайсы, Башҡортостандың халыҡ артисы, республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Азат Айытҡолов, моңло һәм дәртле йырҙары менән күңелдәрҙе арбаған Мәүлетбай Ғәйнетдинов, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы, республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ғәли Хәмзин, Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Тәнзилә Үҙәнбаева, йырлаһа ла, бейеһә лә килештергән, һәр музыка ҡоралында өҙҙөрөп уйнаған халыҡ артисы Ишморат Илбәков һәм башҡалар ошонда ҡанат нығытҡан һәм сәнғәт күгендә үҙҙәренә лайыҡлы урын яулауға өлгәшкән.

Шундай сағыу таланттарҙы үҙенә йыйған һәм ҡанат ҡағып осорға ярҙам иткән «Йәдкәр» үҫә, оҫтара, йәшәрә. Йырсы Хима Йәнбирҙина, бейеүсе Әлфирә Сафиуллина, йырсылар Венера Рәхмәтуллина, Юлай Муллайәнов, флейтасы Ләйсән Сәлимгәрәева, думбырасы Илгизәр Ғәниев һәм башҡалар ансамблдең һәр сығышына яңы сағыу биҙәктәр өҫтәй.

Ансамбль ағзалары киләсәккә яҡты хыялдар менән баға. «Йәдкәр»ҙә яңыраҡ эшләй башлаған йәштәр халҡыбыҙҙың рухи байлығын артабан да изге ҡомартҡы итеп һаҡлау уйы менән йәшәй.

— Беҙгә был ансамбль элек-электән оҡшай ине, уны тыңлап, күреп, ижади ҡаҙаныштарын белеп үҫтек, — ти йәш йырсы Венера Рәхмәтуллина. — Әле үҙебеҙ ошонда эшләй башлағас, халҡыбыҙҙа абруй яулаған ағайҙар һәм апайҙарҙан өйрәнергә, уларҙың ышанысын аҡларға тырышабыҙ.

— «Йәдкәр» — халыҡҡа «тере» музыка илтеүсе, сөнки беҙ фонограммаһыҙ сығыш яһайбыҙ, — ти Рушан Биктимеров. — Нисек кенә оҫта яҙылған булмаһын, фонограмма йырҙың, көйҙөң асылын бар булмышы менән бирә алмай. Беҙҙең ансамблдәр, Мәскәү, төрлө сит ил төркөмдәренә эйәрергә тырышып, халыҡ йырҙарын боҙа. Киләсәктә беҙҙең бөтә милли ансамблдәр халҡыбыҙҙы фонограммаһыҙ йырҙар менән ҡыуандырыр тигән өмөттәбеҙ. Ул ғына ла түгел, халыҡ йырҙарын донъя кимәленә сығарыу бурысы тора беҙҙең алда. Төрөк йырсыһы Таркан үҙ милләтенең йыр өлгөләрен бар донъяға ишеттергән кеүек, беҙ ҙә башҡорт йырын тағы ла юғарыраҡ бейеклеккә күтәрергә тейешбеҙ.

Әлбиттә, ансамблдең проблемалары ла байтаҡ. Әлеге ваҡытта аппаратураларының иҫке булыуы ла бәкәлгә һуға. Әйтәйек, ансамблдәге ҡатын-ҡыҙ йырсыларҙың юғары йышлыҡтағы тауыш нескәлектәрен тулыһынса бирә алмай ул.

— Ҡеүәт етмәй. Шуға ла заман талаптарына яуап биргән аппаратура булһа, беҙ үҙ мөмкинлектәребеҙҙе тағы ла тулыраҡ файҙаланып, йыр-моң нескәлектәрен бар асылы менән халыҡҡа еткерер инек, — тиҙәр йәдкәрҙәр.

— Гастролдәргә йөрөгәндә автобусыбыҙҙың бәләкәй булыуы ла ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Костюмдарҙы рәтләп ҡуям тиһәң, ултырырға урын ҡалмай, — тип шаярта Тәнзилә Үҙәнбаева. — «Йәдкәр» ансамбле — халҡыбыҙҙың йөҙөк ҡашы, тибеҙ. Уның бар булмышы, ултырып йөрөгән автобусы ла уңайлы, ҙур, матур булырға тейеш. Ә ниңә Ф.Ғәскәров ансамбленеке кеүек уңайлы автобус бирмәҫкә? Кейемеңә ҡарап ҡаршылайҙар, аҡылыңа ҡарап оҙаталар, тиҙәр бит.

— Уҙған йыл, аллаға шөкөр, өр-яңы костюмдар тектереп алдыҡ, — ти Әлфирә Сафиуллина. — Әммә ҡыуанысыбыҙ оҙаҡҡа барманы: материалы насар булдымы, тегеләш сифаты түбән булғанғамы, тиҙ арала бөтә матурлығы юҡҡа сыҡты.

Йәдкәрҙәрҙең тағы бер теләге хаҡында телгә алып үтергә кәрәктер. Һәр ансамблдең, артистың хәҙерге заманда үҙ парикмахеры, визажисы булырға тейеш. Был үҙе ансамблдең йөҙөн билдәләүсе нәмә. Ә «Йәдкәр»ҙә ул юҡ. Фольклор төркөмө өсөн был айырыуса мөһим, сөнки бар нескәлектәрҙе белеп кейенеү, биҙәнеү ижади уңышҡа булышлыҡ итәсәк кенә.

Шуны ла әйтеп китеү зарур: «Йәдкәр» ансамбле күбеһенсә ил хәстәре, милләтебеҙ талабы менән йәшәй. Кәрәк икән, көнөнә бер нисә тапҡыр һәм бушлай сығыш яһарға әҙер улар. Ә шулай ҙа матди йәһәттән ярҙамға мохтаж ансамбль ағзалары. Эш хаҡы ғына түгел, фатир мәсьәләһен хәл итеү йәһәтенән дә ярҙам көтә артистар. Юғиһә, Әлфирә Сафиуллина һымаҡ егерме йыл сәхнәлә бейеп тә әле һаман дөйөм ятаҡта көн күреүселәр булыуы күңелде өйкәй. Ғөмүмән, «Йәдкәр» ансамбле һәр яҡлап ҡурсалауға, ярҙамға мохтаж һәм ошоға нигеҙле дәғүә итә. Сөнки барса мөмкинлектәр булғанда йәдкәрселәр халҡыбыҙҙың рухи ынйыларын түкмәй-сәсмәй, барса матурлығында килер быуындарға алып барып еткерәсәк, халҡыбыҙ сәнғәтенә мөхәббәтте һаҡлаясаҡ, уны донъя кимәлендә тотасаҡ.